

# Сәйәхова Сәйҙә Ғәбдинур ҡыҙы

## «Ҡатын-ҡыҙ-милләт әсәһе» V республика конкурсында ҡатнашыусы

**Бөрйән районының Байназар мәктәбе Мәһәҙей филиалының юғары категориялы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, «XIX Төбәк-ара башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы – 2014» конкурсының «Юғары педагогик оҫталыҡ» номинацияһы еңеүсеһе, «XXV Төбәк-ара башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2020» конкурсының «Педагог – ижади шәхес» номинацияһы еңеүсеһе, Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы, БР Хөкүмәтенең Гранты эйәһе, « Иң яҡшы башҡорт һәм урыҫ теле уҡытыусылары» республика конкурсы еңеүсеһе.**

# «Ҡатын-ҡыҙ – уҡытыусы» номинацияһы»







“Ярты төндә уянып,
Йоҡлай алмай уйланып,
Уйлап ятҡан уйҙарҙы,
Таралышҡан ҡуйҙарҙы
Ҡалай итеп йыяйым,
Ҡалай итеп тыяйым?”

Р.Ғарипов.



# Мин йәшәйем икән, тимәк, уйлайым, хыялланам, һөйәм.

(Н. Островский.)







**“Миндә ике кеше йәшәй: берәүһе ысын тормош менән йәшәй, ә икенсеһе уйлай һәм хөкөм итә.**

**(М. Ю. Лермонтов.)**








Үҙ өҫтөмдә туктауһыҙ эшләү, эҙләнеү, һәр һорауға яуап эҙләү, яңылыктарҙы әҙер килеш түгел, ә уйланып кабул итеү, хеҙмәттәштәрем тәжрибәһенән ниндәйҙер яңылык алырға тырышыуым күп уйланырға, кайһы сакта фәлсәфәгә бирелеп алырға, проблемалар солғанышынан сығырлык дөрөҫ юл эҙләргә мәжбүр итә. Көндә лә төрлө темаға, яраткан эшемә бәйле фәлсәфәгә бирелеп, уй-фекерҙәр төйнәп алам.





* Рухи ныҡлыҡ тәрбиәләү өсөн, билдәле ғалимә, яҙыусы Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы Бураҡаева әйтеүенсә, өс таяныс кәрәк: маҡсат, үҙ көсөңә ышаныс, ихтыяр.
* Ошо өс тағанды таймаҫлыҡ итеү беҙҙән, уҡытыусыларҙан, рухи ныҡлығыбыҙҙан тора. Һәр бала алдағы көнгә ышанһын, өмөт менән йәшәһен, кемгәлер таянһын һәм ышанһын.



* **Бала күңеленә юл табыу, өмөт усағын дөрләтеүсе төп кеше – уҡытыусы, әлбиттә. Тик дипломы булған һәр кем уҡытыусы була алмай, кешенең тәбиғәттән бирелгән һәләте лә кәрәк.**

* **Миңә әллә күпме күҙҙәрҙең, ата-әсәләрҙең, балаларҙың күҙҙәре төбәлеүен бөтә йәнем менән тоям, уларҙың өмөтөн аҡларға тырышам, кәңәш һораһалар, кемгәлер ярҙам итә алһам, ныҡ ҡыуанам.**



 

* **Билдәле шағирә Кәтибә Кинйәбулатованың шиғырының түбәндәге юлдары минең кредом булып тора:**

**Ҡайғы-шатлыҡтары балаларҙың,**
**Йөрәгемә минең тулышҡан.**
**Кеше генә белмәй, үҙем беләм,**
**Күпме түҙем, сабырлыҡтар кәрәк,**
**Уҡытыусы булһаң, тормошта.**







**Тағы уйҙар тыуа...**

* Тик йөҙҙән ашыу иң яҡшы, түҙемле уҡытыусы ла, рухлы ғаиләне, иң мөһиме атай менән әсәйҙе алмаштыра алмай. “Аталы бала арҡалы”, ”Атаһы болан алмағандың, балаһы ҡолан алмаç”, тигән халыҡ.
* Ғаиләлә баланы һаҡлаусы, рухи яҡтан көс булырҙай ата-әсә булыу мөһим. Был яҡты донъяға тыуыуҙың һәм йәшәүҙең иң беренсе маҡсаты һәм иң ҙур бәхете – үҙ рухыңды дауам итеүсе балалар ҡалдырыуҙа икәнлеген һәр кем яҡшы аңларға тейеш. Ошо була ла инде йәшәү ҡото. Бына ошоларҙы мин, уҡытыусы булараҡ, ата-әсәләргә, уҡыусыларыма аңлата алам икән, маҡсатыма ирешә алам икән, мин шул ваҡытта ғына ысын уҡытыусы.



* **Ысын уҡытыусы булыр өсөн балаларҙың хәлдәрен аңлай, хистәрен тоя белергә кәрәк. Улар бит һәр береһе шәхес! Һәр береһенең үҙ холҡо бар. Мин бик күп уйланым.**






* Тиҙҙән минең дәрестәремдән балалар үҙгәреп сығыуын, мин биргән белемде иркен ҡулланыуҙарын, тормошҡа үҙ ҡараштары тыуғанын күреү минең өсөн оло бәхеткә әйләнә. Уларҙы белемле булғандары, яҡшы билдәләре өсөн түгел, ә тере, шат, ҡыҙыҡһыныусан, бәхетле, аралашыусан һәм башҡа бик күп яҡшы сифаттары өсөн яраттым.






* **Бигерәк тә әлеге ҡатмарлы заманда, күпселек атай- әсәйҙәрҙең балаһына ваҡыты етмәгән саҡта, уҡыусыларыңа кәңәшсе, серҙәш, таяныс  була алһаң, кәрәк сағында дөрөҫ юл күрһәтеп, хаталарҙан һаҡлаһаң, шунан да ҙур бәхет юҡтыр ул уҡытыусы өсөн.**






- **Минең педагогик маҡсатымдың нигеҙе - юғары һөнәри оҫталыҡҡа ынтылыу, балаларҙың шәхси үҙенсәлектәрен өйрәнеү һәм үҫтереү, ныҡлы белемле, йәмғиәт алдында килеп тыуған мәсьәләләрҙе үҙ аллы хәл итә алырлыҡ шәхес тәрбиәләү. Был иһә тәрбиә һәм белем биреүҙең яңынан-яңы технологияларын, алымдарын, методтарын эҙләү һәм өйрәнеүгә, һәр дәресте уйлап, методик талаптарға тура килтереп ойоштороуға килтерә.**

* Һәр яңы дәүер кешелектең тормош - көнкүрешенә, эшенә үҙенең яңы бурыстарын йөкмәтә, яңылыктарын индерә. Хәҙерге заман мәктәптәренә ҡуйылған талап буйынса, уҡыусы һәр тарафта киң ҡарашлы, көслө рухлы, уҡымышлы, мәҙәниәтле булырға тейеш, тип иҫәпләйем һәм ниндәй генә халыҡтың телен өйрәнһәк тә, беҙ уны шул халыҡтың мәҙәниәте аша тулыраҡ аңлайбыҙ. Шуның өсөн телде мәҙәниәтһеҙ өйрәнеү мөмкин түгел. Туған телде өйрәнеү - донъяны танып-белеү, халыҡтың быуаттар буйына йыйылып килгән ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, мәҙәниәтен өйрәнеүгә, һаҡлауға берҙән-бер аҫҡыс булып тора. Эште ошо нигеҙҙә ойоштторам да инде. Уҡыусыларым Урал батыр кеүек Тыуған илен һәм ерен һаҡлаусы балалар булып үҫеүенә иманым камил.



* **Уҡыусыларымдың, үҙ баламдың күҙҙәре балҡып торһа, тирә-яҡҡа яҡты нур сәсһә, улар үҙ телебеҙҙә сатнатып Рәми Ғариповтың “Туған тел”ен һөйләһә, “Урал батыр” эпосын сәхнәләрҙән яңғыратһа, уҡып сыҡҡас, мәктәпкә йә өйгә килеп: “Рәхмәт, апай!”- тип әйтһә, иң ҙур шатлыҡ, бәхет шул минең өсөн.**

* **Шул мәлдә, бала күңелендә эҙ ҡалдырырлыҡ, рәхмәт һүҙен ишетерлек уҡытыусы булырға,**

  **-тигән фекер күңелдә нығына.**









* Эйе, кеше менән эшләү, уртаҡ тел табыу, уларҙы үҙ фекереңә ышандырыу, артыңдан эйәртеү өсөн, иң тәүҙә, үҙеңдең рухи ныҡлығың кәрәктер ул.








* **Күңел донъямдың ҡайһы ишеген асма, фәлсәфәүи уйҙар, уйҙар... . Эшем бала күңеле, аҡ ҡағыҙға матурлыҡ, изгелек, шәфҡәтлелек орлоҡтарын сәсеү, уларҙы ысын кеше, шәхес итеп тәрбиәләү менән бәйләнгән икән, тормоштағы һәр һорауға әҙер яуабым, үҙ фекерем булырға һәм заман менән бергә атларға тейешмен. Сөнки мин –уҡытыусы, күпте белергә, артымдан кешене эйәртә, һүҙемә ышандыра белергә тейеш кеше. Ошоғаса тарихтың бөтә короло шонда ла иң хөрмәтле һаналған һөнәр эйәһе –Уҡытыусымын. Ғаиләмдә улым – Өфө ҡалаһында полиция хеҙмәткәре, ә киленем тәрбиәсе булып эшләй. Ейәнем Арслан балалар баҡсаһында тәрбиәләнә. Был минең өсөн бик тә ҡыуанысло. Уҡыусыларымдың күбеһе уҡытыусылар.**









* **Бөйөк Платон юкка ғына: ” Тик өс һөнәр генә Хоҙайҙан бирелгән – табип, укытыусы, хөкөм итеүсе,” тимәгәндер.**




* Уҡытыусы тигән исемем бар,
* Мәңгелеккә, тиеп һайланған.
* Орлоҡ һалам бала  күңеленә
* Бик кәрәкле, тиеп һаналған.











* Әлдә уттан, яктылыктан
* Ялҡын алам, ҡыуанам.
* Эшемде лә, үҙемде лә
* Ялҡын менән һуғарам.
* Ярым-йорто, быҫҡып ҡына
* Йәшәмәйем донъяла.
* Яҡты ялҡын булып эҙем
* Ҡалһын бик аҙ булһа ла.






* **Эйе, миндә ике кеше йәшәй: берәүһе ысын тормош менән йәшәй, йәш быуынға белем бирә, күңелдәрҙе яҡшы һүҙ менән дауалай, ә икенсеһе уйлана, фекер төйнәй һәм киләсәк хаҡына яңы асыштар, балҡыштар, уңыштар әҙерләй.**



# Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!